**Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың телмәр үҫешендә ҡулланылған технологиялар - конкурс материалы**

*Фәтхетдинова Ғәлимә Филкәт ҡыҙы,*
*беренсе категориялы тәрбиәсе*

**Модель - схемалар ҡулланып**
**“Эт үҙенә нисек хужа тапкан?”**
**әкиәтен һөйләргә өйрәтеү**

Билдәле ғалимдар әкиәттәрҙе бик күп өйрәнгәндән һуң уларҙың бала үҫешендә бик ҡатмарлы һәм кәрәкле элемент булыуын асыҡланы. Халыҡ әкиәттәре баланың күҙалауын ғына үҫтереп ҡалмай, ә уның ижади эшмәкәрлектәренең үҫешенә лә йоғонто яһай. Әммә быныҡ өсөн баланы әкиәт менән таныштыра белеү бик отошло. Балаға әкиәтте уҡып ҡына сығыу түгел, ә төрлө һорауҙар аша әкиәт йөкмәткеһен үҙләштереү мөһим. Әкиәттең йөкмәткеһенә ентекле туҡталып, уйнап ҡарау һәм төрлө төп фрагменттарын моделләштереү ҡулайлы.

Йәш үҙенсәлектәренә таянып, баланың күҙаллауына, ижадилығына, фекерләүенә, хәтерен, телмәрен үҫтереүгә булышлыҡ иткән әкиәттәр һайлана.

Өлкән төркөмдәрҙә баланың телмәре бик әүҙем үҫешә. Телмәр аша бала тирә-йүн менән таныша, бер- береһе менән аралаша. Был йәһәттән баланың бәйләнешле телмәре өҫтөнлөк ала.

Әммә тап ошо йәш осоронда балның алдында төрлө **проблемалар** килеп тыуа.

- Балалар һорауҙарға бер һүҙ менән генә яуап бирәләр, һөйләмдәрҙә һүҙҙәрҙе дөрөҫ урынлаштыра алмайҙар;
- Һүҙлек запасы бик һай;
- Диалогик телмәрҙәре бик ярлы: һорауҙарҙы аңлайышлы, грамоталы төҙөй, кәрәкле урында ҡуллана алмайҙар,
- Монологик телмәр:ҙәре үҫешеп етмәгән (ябай ғына һүрәтләү йәки сюжет буйынса хикәйә төҙөү уларға бик ауыр бирелә),
- Телмәр мәҙәниәте етәрлек кимәлдә түгел ( интонация, тауыш көсөн, телмәр темпын ҡуллана алмайҙар),
- Дикциялары юҡ.

**Актуалллелеге.**

Ошо килеп сыҡкан проблемалар бөгөнгө көндә баланың телмәр үҫешендә бик актуаль булып тора.

Тыуған тел, телмәр үҫеше бала үҫешендә бик әһәмиәтле. Телмәр үҫтереүҙә ҡуйылған бурыстарҙың береһе бәйләнешле телмәр үҫтереү. Бәйләнешле телмәр үҫтереү балаға тирә-йүндәге кешеләр менән бәйләнеш, йәмғиәттә тәртип ҡағиҙәләрен булдыра, баланың шәхси үҫешендә хәл иткес шарт булып тора. Бәйләнешле телмәрҙең әһәмиәте мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы тәрбиәләү теорияһына һәм практикаға эффектлы саралар һәм алымдар ҡулланып баланы өйрәтеүгә ҙур бурыстар ҡуя. Моделләштереү

алымын ҡулланыу балаға белем биреү процессында фекер, хәтер үҫешенә булышлыҡ итә, үҙаллылыҡ һәм ижадилығына мөмкинселектәр тыуҙыра. Киләсәктә мәктәптә бала өсөн бәйләнешле телмәр уңышлы уҡыу сараһы ла булып тора.

Бөгөнгө көндә “Аҡбуҙат” балалар баҡсаһында тап телмәр үҫеше буйынса эксперименталь майҙансыҡ эшләп килә.

Балалар менән эшләгәндә уларҙың бәйләнешле телмәренә ҙур иғтибар бирәбеҙ. Һөйләү- бәйләнешле телмәр үҫтереүҙең төп сараһы. Балалар менән эшләй башлағанда уларҙың телмәрҙәре үҫешеп етмәүе, үҙҙәре тураһында ла бик ауыр һөйләүҙәре, әҙәби әҫәрҙәрҙе ауырлыҡ менән тәрбиәсе ярҙамында һөйләй алыуҙары асыҡланды. Моделләштереү алымын ҡулланыу беҙгә бик күп ярҙам булды.

Модель - схемалар ҡулланып баланың бәйләнешле телмәрен үҫтереү бик күп билдәле алымдарҙы берләштереп эшләү алымы. Баланың ижади үҫешенә йоғонто яһарлыҡ итеп мөмкинселектәр тыуҙырҙыҡ.

Беҙҙең эшебеҙҙең **төп маҡсаты**: баланың ижади телмәр һәләтен үҫтереү

**Бурыстар**:

- аралашыу һәләттәрен үҫтереүгә булышлыҡ итеү;
- актив телмәрен киңәйтеү, камиллаштырыу;
- әҙәбиәттең нәфис, асыҡлау сараларын ҡулланыуға мөмкинселектәр тыуҙырыу;
- алмаштырыусы элементтар ҡулланғанда баланың фекерләүен, эмоционаллелеген, хәтерен үҫтереү;
- моделдәр, схемалар ярҙамында күҙалланған образдарҙы тыуҙырыуҙы формалаштарау;
- алмаштырыусы элементтарҙы персонаждың төҫө, формаһы, күләме буйынса билдәләйә алыу һәләтен үҫтереүгә булышлыҡ итеү;
- ижади ҡыҙыҡһыныу формалаштырыу;
- тулы, тасуири яуаптар төҙөргә өйрәтеүҙе дауам итеү;
- телмәр нескәлеген күрә, аңлай белеү.

**Принциптар**:

- ижади шәхес тәрбиәләүҙә ижадилыҡ һәм белем биреү процессының бәйлелеге;
- системалыҡ һәм эҙмә-эҙлелек принцибы;
- белем биреүҙә шәхси ҡараш булдырыу принцибы;
- материалды йәш үҙенсәлегенә тап килтереп алыу, аңлайышлылыҡ, ҡабатланыу принцибы;
- төрлө алмаштырыусы предметтарҙы, партнерҙы, персонажды, сараларҙы ирекле һайлап алыу принцибы;
- һәр баланың йәш үҙенсәлеген һәм уның мөмкинселектәрен иҫәпкә алыу принцибы.

**Тормошҡа ашырыу формаһы**

“Эт үҙенә нисек хужа тапҡан” Ҡ. Даян ижад иткән әкиәтте өйрәнеп сыҡтыҡ һәм Веракса методикаларына таянып моделдәр, схемалар төҙөнөк.

Эксперименталь майҙансыҡта ойошторолған белем биреү конспекттары төҙөнөк. Веракса программаһында 8 эшмәкәрлек булһа беҙ 7 эшмәкәрлеккә индерҙек. Ойошторолған белем биреү эшмәкәрлектәрендә апробация үҙгәреп ҡараныҡ. Һәр ойошторолған белем биреү эшмәкәрлеге бер- береһе менән бәйле, ниндәйҙер үҙгәрештәр индереп барыла. Индивидуаль һәм коллектив эштәр сиратлашып килә.

**Йәкмәткеһе**

- Геометрик фигуралар менән уйындар.
- Балаларҙы символикалар менән таныштырыу (хайуандарҙы, кешеләрҙе, төрлө предметтарҙы геометрик фигуралар ярҙамында һүрәтләү сараһы).

**Маҡсаты**: балаларға һәр предмет аша төҫтәре, формаһы, күләме буйынса алмаштырыусы предметты күрә белергә өйрәтеүгә булышлыҡ итеү.

Методик алымдар

Күргәҙмә

- Иллюстратив материалдар ҡарау
- Символ – һүрәттәр ҡулланыу
- Өлгө буйынса ижади эштәр
- Картина буйынса план (моделләштереү)
- Геометрик фигуралар ярҙамында уйындар

Телмәрле

- Һорауҙар (балаларға һәм балаларҙың һорауҙары)
- Һөйләшеүҙәр (иҫкә төшөрөү, күрһәтмә,аңлатыу)
- Әңгәмә
- Телмәрле дидактик уйындар
- Берлектә хикәйә төҙөү
- Педагогтың, баланың һөйләүе.

**Ата-әсәләр менән бәйләнеш**

Эшмәкәрлеккә ата-әсәләрҙе йәлеп итеү бик яҙшы һөҙөмтәләр бирә. Ата-әсәләр байрамдар, иртәлектәр, кеүңел асыу сараларын ойоштороуҙа ҙур ярҙам күрһәтә, йыһазландырыу өсөн ҡулланмалар әҙерләйҙәр. Консультациялар, лекциялар, рекомендациялар ярҙамында үҙ белемдәрен камиллаштыралар.

**Йомғаҡлау**

Һеҙгә тәкдим ителгән модель схемалар ярҙамында “Эт нисек хужа тапҡан” әкиәтен өйрәнеүҙә һеҙгә ҙур янрҙам булыр тип ышанып ҡалабыҙ.

***Н. А. Веракса методикаһы буйынса моделдәр ярҙамында башҡорт халык әкиәттәрен һөйләү өсөн ҡулланмалар әҙерләнелде:***

- ✓ **“Эт нисек үҙенә хужа тапкан?”**
- ✓ **“Һин минең әсәйем түгелме?**







***Автор әҫәрҙәре, башҡорт халыҡ әкиәттәре буйынса О.С.Ушакова, Е.А.Смирнова методикаһына таянып, һүрәт буйынса әкиәтте һөйләү өсөн***
***методик ҡулланмалар әҙерләнелде :***

- ✓ **“Кем иң матуры?”, авторы Фәрзәнә Фәтхуллина;**
- ✓ **“Тайыштабан ниңә уйнарға сыҡманы?, авторы Айһылыу Йәғәфәрова;**
- ✓ **“Төлкө менән торна”, башҡорт һәм рус халыҡ әкиәте**









***Уйлап сығарылған әкиәт, хикәйә ярҙамында методик ҡулланма әҙерләнде:***

- ✓ **“Йәш ветеринарҙар” (Р.И.Әминева, А. Ф. Уразбаева, Г. Р.Йылҡыбаева);**
- ✓ **“Ҡыҫкағойроҡ мажаралары” (Г.М.Йыһангирова, Г.С.Рәмиева, Р.И. Ҡолмөхәмәтова);**
- ✓ **“Яңы дуҫ” (М.Ә.Аҫылбаева, Й.Ғ.Зөбәйерова, Ғ.Ф.Фәтхетдинова**







